*Миләүшә ИҘРИСОВА,*
*музыка белгесе*

# Эш өҫтәлендә — ҡурай

## (Зәһир Исмәғилев хаҡында уйланыуҙар)

*Яҙ килә лә китә,*
*Йөрәк көтә, көтә.*
*Йәшлек үтә, үтә яҙ һымаҡ.*
*Һин былбылым минең,*
*Йырланмаған йырым,*
*Балҡып кил һин аяҙ таң һымаҡ...*

Башҡорт мөхитендә ошо йырҙы белмәгән, уның ҡабатланмаҫ моңонан әҫәрләнмәгән кеше юҡтыр. Был йыр күптән инде беҙҙең рухи донъябыҙҙың айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелгән. Улай ғына ла түгел, күптәр уны халыҡ йыры тип иҫәпләй. Хәйер, Зәһир Исмәғилев йырҙарының күбеһен халыҡ яратып, үҙенеке итеп ҡабул иткән. Тыуған халҡыңдың һөйөүен тойоуҙан, ихлас ихтирамын күреүҙән дә ҙурыраҡ бәхет бармы икән?

Ғөмүмән, ижадсы яҙмышы хаҡында уйланғанда мине шундай һорау борсой: талант нимә ул? Ижад ҡеүәһе әҙәм балаһына ҡайҙан килә? Илһам һәм рух көсөн, үҙ-үҙенә ышаныс һәм ижад батырлығын ҡайҙан ала ул ижадсы? Әҙәм балаһының үҙен белә башлағандан бирле кешелек донъяһына буяуҙар аша, шиғри рифма йәиһә өн-моңдар ярҙамында ниҙер әйтергә ашҡыныуын нисек аңлатырға: эске донъяһын башҡаларға еткерергә теләүеме, даншөһрәткә ынтылыуымы? Бәлки, кеше шулай үҙен быуаттар буйына ымһындырып та, бары тик сәнғәт әҫәрҙәрендә генә мөмкин булған Бәхет һәм Гүзәллек хаҡындағы оло хыялын яҡынайтырға тырышалыр...

Оло ижадсы, моң эйәһе, СССР-ҙың халыҡ артисы, М.Глинка һәм С.Юлаев исемендәге дәүләт премиялары лауреаты, Башҡортостан Фәндәр академияһының почетлы академигы, профессор Зәһир Ғариф улы Исмәғилев менән булған осрашыуҙар, әңгәмәләр миндә бына шундай һорауҙар уятты. Ә инде яуаптарын бергәләп эҙләйек, уҡыусым.

Илап тыуһам да мин,
                    йырлап үҫтем...
Йырлап йәшәйем мин бөгөн дә.

Был донъяла бер нәмә лә осраҡлы түгел, тиҙәр. Буласаҡ композиторҙың иң гүзәл төбәктәрҙең береһендә — Башҡортостандың Белорет районында тыуыуы ла һис осраҡлы булмағандыр. Был ерҙәрҙә тәбиғәт үҙе тотош бер моңдан яралған кеүек. Күккә олғашҡан ҡаялы тауҙар аһәңе, ҡуйы урмандар шауы, саф һыулы йылғалар сылтырауы һандуғастар һайрауында ғына түгел, һулар һауала моң булып ағыла. Ғалимдар раҫлауынса, кеше әсә ҡарынында уҡ тирә-яҡ мөхиттән, әсәһенең йырынан, әйткән һүҙенән, уйлаған уйынан, хис-тойғоларынан йәшәү көсө йыя.

Зәһир Исмәғилев Белорет районының Сермән ауылында 1917 йылдың 8 ғинуарында донъяға килгән. Әсәһе баҫҡан һайын әйтем, әйләнгән һайын йыр көйләгәнгә, ағалары ҡурай уйнағанғалыр, Зәһир бәләкәйҙән халыҡ көйҙәрен тыңлап, уларҙан матурлыҡҡа, сабырлыҡҡа өйрәнеп үҫә. Хәйер, был яҡтарҙа һәр өйҙә ҡурайсылар, өй аша йыраусылар, бейеүселәр йәшәй. Зәһир ҙа, Ҡаһир ағаһынан күреп, иң элек ҡурайҙа уйнарға өйрәнеп ала. Башта, ҡурайға буйы етмәгәнлектән, ағаһы тотоп тора, Зәһир икенсе осонан өрә. Тәүге тапҡыр көй килеп сыҡҡас, түбәһе күккә тейгәнен яҡшы хәтерләй Зәһир

ағай... Тора-бара ағаларынан да, тирә-яҡтағы олораҡ ҡурайсыларҙан да оҫтараҡ уйнарға өйрәнә, ауылдың иң шәп ҡурайсыһы булып дан ҡаҙана. Ә ауылда иң яҡшы гармунсы йәки ҡурайсының өлөшөнә төшкән һоҡланыу, йәше-ҡартының ихтирамы, һәр байрамда, йыйында тейгән рәхмәттәр, ҙурлап маҡтауҙар... Былар барыһы ла үҫеп кенә килгән талант эйәһе — йәш үҫмерҙә сәм уята һәм шуның менән үҙенә күрә бер ҙур мәктәпкә әйләнә. Кесе йәштән үк халыҡ алдында яуаплылыҡ тойоп өйрәнә ул.

Ауыл балалары хеҙмәт юлына иртә баҫа. Заһир ҙа атаһына ярҙамсы булып, ун йәше тулыр-тулмаҫ, урман эшенә йөрөй башлай. Ә унда... Шағирәнә күңелгә туйғансы хыялланырға, рәхәтләнеп тәбиғәт тауыштарын тыңларға мөмкин. Заһир тормошто кешеләрҙән генә түгел, ә тау-урмандан, сәскә-үләндәрҙән, шишмәләрҙән дә өйрәнергә кәрәклеген бик иртә аңлай. Бәлки, аңлап еткермәһә лә, йөрәге менән тойғандыр. Был хаҡта уның тыуған ерен данлап йырлаған әҫәрҙәре үҙҙәре үк әйтеп тора.

Атаһы менән урманда эшләгән саҡтарын Заһир ағай былай хәтерләй:

— Атайым ғүмере буйына бер генә йыр йырланы:

Үткән генә ғүмерҙең юҡ хисабы,
Таңдар ата ла шул, кис була...

Башҡа йыр белмәй ине. Ул миңә «улым» тип өндәшмәне, гел «малай» ти торғайны. «Малай, зирәкһең, начальник булып китеүең бар. Ҡара уны, начальник булһаң, ерҙән юғары йөрөмә, ел бәреп йығыр...» Был һүҙҙәрҙең айышына, әлбиттә, ваҡыт үткәс кенә төшөндөм. Ул мине тыуған ерҙән, халыҡтан өҫтөн булма, тип өйрәткән...

Кешенең был донъяла күрәсәге маңлайына яҙылған ти. Хаҡ һүҙме был, юҡмы, әммә беҙҙең йөрөр юлдарыбыҙҙы яҡтыртып, эштәребеҙгә фатиха биреп тороусы юғары аҡыл барлығына ышанам. Бына ошо юғары көс урман техникумын тамамлаған егеттең яҙмышын ҡырҡа бороп, сәнғәт юлына килтергәндер ахыры. Бер ваҡыт шулай Белоретҡа Башҡорт дәүләт драма театры килеп төшә. Артистар араһында Белорет егете, йәш актер Арыҫлан Мөбәрәков та була. Спектаклдәрҙең береһе алдынан труппаның ҡурайсыһы — Ғиниәт Ушанов ауырып китә. Арыҫлан, Заһирҙың яҡшы ҡурайсы икәнлеген белеп, Ғиниәт ағай урынына уйнауын үтенә. «Дебют» бик уңышлы үтә... Ә артабан инде, егеттең сәнғәт өсөн генә яралғанын күреп, Арыҫлан ағай ҙа, башҡа артистар ҙа уны театрға эшкә килергә өндәй. Сәхнә «ене» ҡағылған егет үҙе лә артистарҙан айырылырға теләмәй, Өфөгә юллана.

Бына шулай, йыш ҡына әҙәм балаһының тормошо осраҡлыҡтарҙан, бәхетле тап булыуҙарҙан ҡорола. Заһир Исмәғилевтың ғүмер юлын байҡай башлаһаң, бер-бер артлы теҙелгән осраҡлыҡтарҙың ни тиклем әһәмиәтле булыуына хайран ҡалаһың. Өфөгә килеп, театрҙа эшкә тотонғас, уның һулышы иркенәйгәндәй була, сөнки Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Мәсәлим Вәлиев, Булат Имашевтар менән аралашыу уның музыкаль һәм донъяуи ҡараштарын киңәйтә. 1937 йылда Өфөгә, башҡорт халыҡ йырҙарын йыйыу ниәте менән, Мәскәү композиторы Николай Будашкин килә. Исмәғилев менән осрашҡандан һуң, егеттең урғып-ташып торған музыкаль һәләтен күреп, хәтерендә һаҡланған йыр байлығына һоҡланып, Будашкин уның мотлаҡ уҡырға, композитор булырға тейешлеген әйтә. «Ә нимә була ул — композитор?» — тип аптырай Заһир. «Композитор ул — музыка яҙыусы кеше», — ти ул.

Композитор! Бына ул Заһирҙың үҙенә лә аңлашылып етмәгән, әммә күңел түрендә йөрөткән хыялы!

Заһир ҡыш миҙгелендә тыуған. Әсәһе әллә күпме әйткәне бар: «Улым, ҡыш көнө тыуған кеше ныҡыш була...» Ныҡышлыҡ тигәндә, Заһир үҙе лә белә — алдына ҡуйғанды эшләмәйенсә туҡтап ҡала торған ғәҙәте юҡ. Шуға ла, Мәскәү консерваторияһына абитуриенттар һайларға килгән комиссия уны исемлеккә индермәһә лә, үҙһүҙләнеп, башҡалаға барып уҡырға ине-

үен Зaһир ағай күңелле бер эпизод итеп хәтерләй: «Консерваторияға килдек, Башҡортостандан 15 кеше, һәм мин — ун алтынсы. Тегеләргә ятаҡта урын әҙерләнгән, миңә юҡ. Төндө ҡайҙа үткәрергә тип торғанда, бер үткер теллеһе рояль өҫтөнә менеп ятырға тәҡдим итте. Мин аптырап торманым — мендем дә яттым рояль ҡапҡасына. Иртән иртүк яман тауышҡа уянып китһәм, бер оло танаулы бөҙрә сәсле егет роялдә дөбөр-шатыр уйнап ултыра. «Һин нәмә, белмәһеңме был нимә? Был — рояль! Төш хәҙер үк!» — тип мине әрләп ташланы.

Бына шулай бөҙрә сәсле егет мине тиргәй-тиргәй роялдән ҡыуып төшөрҙө... Аҙаҡ, уҡый башлағас, егеттең үҙе менән дә яҡындан таныштыҡ. Күп йылдар үткәс, әрмәндең атаҡлы композиторы Арно Бабаджанян менән был ваҡиғаны иҫкә төшөрөп рәхәтләнеп көлә торғайныҡ».

Имтиханға Зaһир үҙенең айырылғыһыҙ тоғро дуҫы — ҡурайы менән керә һәм башҡорт көйҙәрен уйнай. «Был көйҙәрҙе кем яҙған?» — тип һорайҙар унан. «Халыҡ. Мин дә бит — халыҡ. Тимәк, мин яҙғанмын», — тип яуап бирә егет күҙен дә йоммай.

Консерватория профессорҙарының күңелен Зaһирҙың аһәңле ҡурайы тетрәндергәнме, әллә егеттең уҡырға киреү теләге еңгәнме — нисек кенә булмаһын, Зaһир П.И. Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһына ҡабул ителә. Бөгөн Зaһир Ғариф улы үҙенең остаздары — профессорҙар Виктор Белый, Владимир Фере, Анатолий Александровтарҙы оло рәхмәт тойғолары менән телгә ала. Әлбиттә, уҡытыусыларына ла, Зaһирҙың үҙенә лә уҡыу осоро оло һынау йылдары була. 20 йәшкәсә нота грамотаһын да белмәгән егеткә музыкаль «әлифба»ны ғына түгел, ә профессиональ музыка сәнғәтенең бар ҡаҙаныштарын бер юлы үҙләштереп, гармония, полифония, композиция ҡанундарын өйрәнергә; өйрәнеп кенә ҡалмай, ошо ҡанундарға ярашлы үҙ әҫәрҙәрен ижад итергә тура килә.

* * *

Һай, Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым...
С.Юлаев.

Зaһир Исмәғилевтың диплом эше — «Салауат Юлаев» операһы. «Ҡурайҙан — операға!» тигән ҡанатлы һүҙҙәрҙе ишетмәгән кеше юҡтыр. Ә бит был һүҙҙәргә бик тәрән мәғәнә һалынған. «Салауат Юлаев»тың партитураһы тотош халыҡ көйҙәре менән һуғарылған: «Салауат», «Урал», «Сәлимәкәй»... Зaһир бала саҡтан ишетеп, ҡурайында уйнап үҫкән йырҙар. Халыҡ көйҙәре фрагмент итеп бирелмәһә лә, авторҙың һәр фразаһында яңғырай, сөнки композиторҙың фекерләү ҡеүәһе халыҡсан. Һәм тап шул сифаты — халыҡсанлығы менән көслө лә. «Салауат Юлаев»тың премьераһы башҡорт музыка сәнғәтен бөтөнләй икенсе кимәлгә — профессионаллек дәрәжәһенә күтәрә, авторына танылыу, башҡарыусылары — Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ғабдрахман Хәбибуллин, Баныу Вәлиева, Мәғәфүрә Сәлигәскәроваларға тамашасының ихлас һөйөүен килтерә. Төп ролде башҡарыусы Мәғәфүр Хисмәтуллин иһә әлеге көнгә тиклем хаҡлы рәүештә «иң яҡшы Салауат» исемен йөрөтә. Спектакль тәүге тапҡыр ҡуйылған көн — 1955 йылдың 15 апреленән алып опера бер нисә тапҡыр сәхнәләштерелде, йөҙләгән тапҡыр күрһәтелде. Уларҙың иң иҫтәлеклеһе, әлбиттә, 1955 йылдың май-июнендә Мәскәүҙә уҙған башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре. Алыҫ Башҡортостандан килгән йәш композиторҙың әҫәренән бер кем дә быңдай өлгөргәнлекте, формалар камиллығын, көй, интонациялар нәфислеген көтмәгәндер. Әҫәрҙә музыкаль образдарҙың һүрәтләнеше, халыҡ көйҙәренең академик ҡанундарға үрелеп, тәбиғи үҫеше — барыһы ла һоҡландыра. Башҡорт операһының өлгөргәнлек осорон тап шул саҡтан алып иҫәпләргә кәрәк.

«Салауат Юлаев»ҡа тиҙҙән илле йәш туласаҡ. Һәр яңы театр миҙгелен «Салауат Юлаев» операһы менән асыу Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының матур йолаһына әүерелде. Был йолаға инде 47 йыл.

«Минән йыш ҡына, ҡайһы әҫәрең яҡыныраҡ, тип һорайҙар. Әсә кешенән ҡайһы балаһын нығыраҡ яратыуын һорайҙармы ни? Минең өсөн һәр әҫәрем балам кеүек ҡәҙерле. Һәр береһе йөрәгемдән урғылып сыҡҡан. «Салауат» — тәүге балам... Уны яҙыуы айырыуса ҡыйын булды. Ауыр ваҡытта яҙылды ул. Төрлө гәйеп табып, консерваториянан ҡыуҙылар. Миңә таҡҡан гәйептәрҙең исемлеге 17 пункттан тора ине... Бер йыл үткәс кенә яңынан консерваторияға әйләнеп ҡайта алдым. Опера һынлы операға ҡурҡмайынса тотона алғаныма әле хәҙер ҙә аптырайым. Либретто авторы Баязит ағай Бикбай бик ныҡ тырышты: «Операны тик Исмәғилев кенә яҙа аласаҡ», — ти ине ул. Уның миңә — әле тәжрибәһеҙ композиторға — шулай ышаныуы үҙе ғәжәп хәл. Музыка яҙа башлағас, бер генә уй борсоно мине: опера яҙа алмаһам, яҡташтарым, халҡым күҙенә нисек күренермен? Салауат бит ул, Салауат!..»

Хәҙер совет власы йылдарын яманлау модала. Ә бит башҡорт профессиональ музыка сәнғәте шул совет осороноң емеше. Ғәмәлдә, башҡорт музыкаһы Европа илдәре 4-5 быуат дауамында үткән юлды 50-60 йыл эсендә үтте. Монодик (яңғыҙ тауышлы) милли мәҙәниәттән музыка сәнғәтенең иң юғары ҡаҙанышы — полифонияға (күп тауышлы музыкаль стиль) күтәрелә, Европа һәм рус музыкаһы ҡаҙаныштарын үҙләштереп һәм шул уҡ ваҡытта милли үҙенсәлеген юғалтмайынса яңы үҫеш юлдарын аса алыуы, ысынлап та, ғәжәпләнерлек. Заһир Исмәғилевтың ижади үҫеш юлы ошо хәҡиҡәттең тере миҫалы булып тора. Ҡурай менән башлап, опера, симфония, балет кеүек ҡатмарлы музыкаль жанрҙарҙа камил әҫәрҙәр ижад итеүгә өлгәшкән композитор үҙенең алдында торған оло граждандыҡ бурысын тойғандыр, әлбиттә.

«Минең тормош, минең быуын кешеләренең тормошо ҡатмарлы ваҡытҡа тура килде. Әммә йәшәгән заманымды ҡәһәрләмәйем. Беҙ тыуған илем бар, халҡым бар, тип ғорурланып йәшәнек, янып эшләнек. Ғүмерем буйы коммунист булдым. Партияға иң ауыр осор — ҡырҡ өсөнсө йылда керҙем. Һуғыш башланғас та фронтҡа ебәреүҙәрен һорап бер нисә тапҡыр военкоматҡа барҙым. Барған һайын кире борҙолар: «Һеҙ бында кәрәгерәк. Һалдаттарҙы атакаға күтәрерлек йырҙар яҙығыҙ!» — тинеләр.

Текст, шиғыр яҡшы булһа, йыр сыға шул саҡта. Ҡадир Даян «Шайморатов генерал» шиғырын килтереп уҡығас, миңә шундай оҡшаны, шундуҡ йыр ҙа тыуҙы. Тәүге башҡарыусыһы — иҫ киткес талантлы йырсы Ғабдрахман Хәбибуллин булды. Конкурста ла еңеп сыҡты «Шайморатов генерал», һәм уны халыҡ шайморатовсыларҙы фронтҡа оҙатҡан саҡта тәүләп ишетте... Һуғыш бөтөп, бер нисә йыл уҙғас, Еңеү байрамында мине унлаған ветеран килеп ҡосаҡлап алды — Шайморатов дивизияһы яугирҙәре ине улар. «Рәхмәт, Заһир, бик ҙурланың беҙҙе!» Генерал Миңлеғәли Шайморатовты, яу яландарында ятып ҡалған дуҫтарын иҫкә төшөрөп, илай-илай йырланылар ветерандар:

«Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал...»

Мин түгел, улар ҙурланы мине ошо рәхмәт һүҙе, йырлауҙары менән... Ә күпме һалдат ҡайтманы һуғыш ҡырҙарынан... Күпме йәш ҡатындар тол, әсәләр яңғыҙ, балалар етем ҡалды. Сәйфи Ҡудаштың «Һин ҡайтманың» шиғырын уҡығас та йөрәгемде ниҙер көйҙөрөп алғандай булды, йыр яҙмай булдыра алманым. Йыр үҙе минең бармаҡтарҙан фортепиано клавишаларына күҙ йәше булып ағылды:

Һандуғастар китте,
көҙҙәр етте,
Муйыл ҡойҙо үҙенең япрағын.
Һине көттөм зарығып,
һағынып көттөм,
Һин һаман да, бәғрем,
ҡайтманың...

«Ел, ерәнем» йырының тарихы былай. Гәзиттә Башҡортостандың ҡайһылыр районынан бер егеттең үҙенең аты менән фронтҡа китеп, һуғышты аҙағынаса үтеп, аты

өҫтөндә иҫән-имен, күкрәгенә ордендар тағып әйләнеп ҡайтыуы хаҡында уҡып һоҡланғайным. Нәжиб Иҙелбайға өндәштем: «Яҙ әле шиғыр, был бит легендаға торошло хәл». Нисек инде шундай ҡаһармандарға арнап йыр яҙмайһың… Илһамланып, дәртләнеп яҙҙым мин был йырҙы…

Шуға шатмын: йырҙарымдың күбеһен халыҡ үҙенеке итте, яратты. Беҙҙең халыҡты «яугир халыҡ, йырсы халыҡ» тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Башҡорт яу сапҡанда ла ҡурайын ташламаған. Йыр — ул ҙур байлыҡ. Йыр менән кеше һуғышҡа кергән. Йыр менән үлемгә барған. Минең үҙ ғүмеремдә йыр яратмаған башҡортто күргәнем булманы. Йырлай белмәһә лә, бына тигән итеп тыңлай белә ул».

* * *

Заһир Ғариф улы Исмәғилевтың ижады күп яҡлы һәм ғәжәйеп бай. Төп урынды, әлбиттә, опера биләй. Һәм бында композитор хеҙмәтенең емешлелегенә хайран ҡалырлыҡ. Исмәғилевтың һәр әҫәре башҡорт опера сәнғәтендә яңы жанр асып ҡына ҡалманы, уның классик өлгөһөн кәүҙәләндерҙе: тарихи-героик «Салауат» һәм «Ҡаһым түрә», эпик опера «Урал илселәре», лирик драма «Ағиҙел тулҡындары», психологик драмалар «Шәүрә» һәм «Аҡмулла». Һәр ҡайһыһы Башҡортостан мәҙәниәтендә генә түгел, ә Рәсәй кимәлендә оло ҡаҙанышҡа әүерелде. Мәҫәлән, «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы башҡорт сәхнәһендә был жанрҙағы «тәүге ҡарлуғас» булыуына ҡарамаҫтан, опера һәм балет театры афишаһын оҙаҡ йылдар биҙәне. Спектакль шулай уҡ Сибай драма театры, М.Йәлил исемендәге Ҡазан, Абай исемендәге Алма-Ата академия опера һәм балет театрҙарында ла ҙур уңыш менән ҡуйылды. Ҡыҙғаныс, һуңғы арала композиторҙың ҙур күләмле әҫәрҙәренең күбеһе Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры афишаһында һирәк күренә. Ә «Алмаҡай» музыкаль комедияһы әлегәсә рампа уттарын күргәне юҡ. «Ҡаһым түрә» операһын да тамашасылар концерт рәүешендә генә тыңлай алды…

Композитор үҙенең операларында ҙур темаларға, ил тарихында эҙ ҡалдырған масштаблы характерҙарға мөрәжәғәт итә. Салауат һәм Юлай, Ҡаһым түрә һәм Аҡмулла, Аҡсәсән һәм Юлтый… Моң эйәһе — автор ихтыярына буйһоноп, улар гүйә быуаттар төпкөлөнән беҙгә мәңгелек ҡиммәттәр: азатлыҡ һәм рух бөйөклөгө, изгелек һәм мөхәббәт, тыуған ер ҡәҙере, кешеләрҙе һәм барлыҡ тереклек донъяһын берләштергән бөйөк Гармония хаҡында һөйләр өсөн ҡайтҡан. Улар беҙҙе рухи фәҡирлектән, наҙанлыҡтан, мәрхәмәтһеҙлектән ҡурсаларға тырыша төҫлө. Ә бит Салауат йәки Аҡмулла йәшәгән дәүерҙән һуң күп йылдар, быуаттар үтһә лә, кешелек һис тә аҡылға, миһырбанлыҡҡа, сафлыҡҡа туйғаны юҡ әле…

«Аҡмулла»ны Йоматауҙа, дачамда яҙҙым. 2-се актҡа ария яҙҙым да ултырып иланым… Аҡмулланы йәлләп иланым. Күпме ыҙа сигергә, үҙ иленән ҡыуылып, кәмһетелеп йәшәргә тура килә уға! Үҙ дәүеренең иң аҡыллы, иң талантлы кешеләрен шулай наҙанлыҡ, көнсөллөк һәләк иткән. Ишмулла Дилмөхәмәтов либреттоны шундай итеп яҙғайны — тыныс ҡына уҡый алманым. Хатта үлем сәғәтендә лә сәсән, үҙенә бысаҡ ҡаҙаусыны ғәфү итеүҙе үтенеп, былай ти: «Ул үлтермәне мине. Мине наҙанлыҡ үлтерҙе…» Аҡмулла XIX быуатта йәшәгән, ә бит әле һаман да шиғырҙары актуаль яңғырай. Уның фәһемле фекерҙәре тулҡынландыра, һиҫкәндерә, уйланырға, эҙләнергә мәжбүр итә. «Аҡмулла»ны яҙған саҡта уның менән бергә Урал тауҙарын ҡыҙырҙым, ҡаҙаҡ далаларын гиҙҙем, уның менән бергә шатландым һәм хәсрәтләндем…»

Был һүҙҙәрҙе композитор ҡайһы әҫәре хаҡында ла әйтә алыр ине. Сөнки уларҙың һәр ҡайһыһына — опера булһынмы, кантатамы, йыр йәки романсмы — авторҙың йөрәк йылыһы һалынған.

«Минең һәр операмда «Урал» көйө яңғырай. «Урал» юҡҡа ғына халыҡ гимны дәрәжәһенә күтәрелмәгән. Был көйҙә — беҙҙең халҡыбыҙҙың хәтере, хыялы, батыр-

лығы. Һәр башҡорттоң күңел түрендә һаҡланған иң изге, иң яҡты уйҙарын туплаған был көй. Бәлки, минең музыкала һеҙ уны аныҡ ҡына ишетмәҫһегеҙ ҙә, әммә унуң һулышын тоймау мөмкин түгел. Нимә генә яҙһам да, халыҡ йыры иң ҙур терәгем булды. Илһам шишмәм дә — халыҡ йыры, остазым да — халыҡ йыры. «Урал», «Буранбай», «Сәлимәкәй», «Ҡолой кантон»... Тағы ҡайһы халыҡта бар шундай хазина? Был хазина — үлемһеҙ, һәм бындай йырҙар тыуҙырған халыҡ һис ҡасан да юҡҡа сыҡмаясаҡ, юғалып ҡалмаясаҡ. Быныһына иманым камил».

Тәүлектә 24 сәғәт. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡытты һуҙып, әллә күпме эштәр атҡарып була, әгәр ҙә дәрт-дарманың булһа. «Заһир Исмәғилев бер генә әҫәрен — «Салауат»ын ғына яҙһа ла XX быуаттың иң арҙаҡлы ижадсылары исемлегенә кергән булыр ине», — тигәйне бер телмәрендә Рәсәй композиторҙар берлеге рәйесе Владислав Казенин.

Заһир Исмәғилев, ғәжәйеп емешле ижад эшенән тыш, ижтимағи тормошта ла бик әүҙем ҡатнаша. 24 йыл буйына Башҡортостан композиторҙар берлеген етәкләй, республика Юғары Советы депутаты була, 12 йыл Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик республикаһының Юғары Советы рәйесе вазифаһын башҡара. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев әйтеүенсә: «Заһир Исмәғилев, Салауат һымаҡ, матурлыҡ донъяһын тыуҙырып ҡына ҡалманы, ошо матурлыҡты яҡлап көрәшә лә белде».

1968 йылда Өфөлә сәнғәт институты асылыу хаҡында ҡарар сыҡҡас, уны ойоштороу һәм етәкләү бурысы Заһир Исмәғилевҡа ышанып тапшырыла. Был осорҙо Заһир ағай үҙенә хас юмор менән иҫкә ала: «Ленин урамындағы 14-се һанлы йортҡа килдем. Ундағы берҙән-бер өҫтәл артына ултырҙым да уйлай башланым, эште ниҙән башларға...»

Ректор институтҡа Мәскәү һәм Ленинград консерваторияларынан талантлы йәш белгестәрҙе туплай, иң юғары талаптарға яуап бирерлек кимәлдә уҡыу-уҡытыу программалары төҙөлә. Ошо, ғәмәлдә өс юғары уҡыу йортон: консерватория, театр һәм художество институттарын берләштергән үтә лә ҡатмарлы уҡыу йортон Заһир Ғариф улы егерме йыл етәкләне. Был дәүер эсендә Өфө дәүләт сәнғәт институты ысын мәғәнәһендә мәҙәниәт усағына әүерелә. Студенттар һәм уҡытыусылар араһында Рәсәй, Союз һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаттары үҫеп сыға. Рәжәп Шәйхетдинов, Виктор Фильчев, Вадим Монастырский, Игорь Лавров һәм башҡа музыканттар халыҡ-ара конкурстарҙағы еңеүҙәре менән Өфөгә генә түгел, бөтә Рәсәйгә дан килтерҙе, республика өсөн кадрҙар тәрбиәләне. Заһир Исмәғилев үҙе институт ойошторолған көндән алып өс тиҫтә йылға яҡын буласаҡ композиторҙарҙы уҡыта. Уның шәкерттәре араһында танылған композиторҙар Рим Хәсәнов һәм Абрар Ғабдрахманов, Рафаил Ҡасимов һәм Роберт Ғәзизов, Рәшит Йыһанов, Айрат Ҡобағошов, Нур Дауытов, Айрат Кәримов, Азамат Аҙнағолов, Ғәзиз Дәүләтбирҙин, Илшат Хәлиловтар бар. Шулай уҡ Ҡазан һәм Мәскәү, Якут-Саха һәм Сыуаш республикалары композиторҙары араһында ла Исмәғилевты остаздары тип иҫәпләүселәр бихисап.

«Уҡыусыларымда иң тәүҙә хеҙмәткә, бер туҡтауһыҙ үҙ һәләттәрен камиллаштырыуға ынтылыш тәрбиәләргә тырыштым. Яратҡан композиторым П.И. Чайковский әйтмешләй, ижадсы ҡулын ҡаушарып, илһам килгәнен көтөп ултырырға тейеш түгел. Көндән-көн, бар көсөн, бар түҙемлеген һалып эшләгәндәрҙе генә һайлай ул илһам... Йәнә уҡыусыларыма әйтер һүҙем шул: халыҡ ижадын белегеҙ, уны бер туҡтауһыҙ өйрәнегеҙ, уны яратығыҙ. Композитор шунда ғына композитор тип аталырға хоҡуҡлы — эшен халыҡ ҡабул итһә. Әгәр ҙә әҫәрҙәрегеҙ ябай халыҡтың күңеленә юл таба алмай икән, әгәр ҙә халыҡтан өҫтөн булырға тырышһағыҙ, һеҙҙең ижадығыҙ һуҡыр бер тин дә тормай. Бәлки, ҡаты бәреләмдер... Әммә хәҙерге заман музыкаһының ҡайһы бер «ҡаҙаныштарын» ҡабул итә алмайым. Бигерәк тә үҙебеҙҙең республика

композиторҙарының милли нигеҙҙән алыҫлашыуын күреп эсем боша...»

1972 йылда, Заһир Исмәғилев тәҡдиме буйынса, сәнғәт институты эргәһендә махсус урта музыка мәктәп-лицейы асыла. Башланғыс аҙымдарынан уҡ институт педагогтарының ҡатнашлығында нығынған мәктәп тора-бара йәш музыканттарға ҡанат ҡуйыусы, таланттар асыусы, юғары уҡыу йортона кадрҙар әҙерләүсе белем усағына әйләнде. Унда республикабыҙҙың ҡала һәм ауылдарынан йыйылған айырыуса һәләтле балалар тәрбиәләнә. Бөгөн лицейҙы тамамлаусылар араһында — сәнғәт фәндәре кандидаттары, халыҡ-ара конкурстар лауреаттары, төрлө һөнәр эйәләре бар. Уларҙы Рәсәйҙең теләһә ҡайһы ҡалаһында, сит илдәрҙә осратырға мөмкин.

Заһир ағай, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, лицей балалары менән даими аралашып тора, ошо осрашыуҙарҙан йән аҙығы ала, кескәй музыканттарҙың уңыштарына шатлана.

* * *

Боронғо гректар талант эйәһен илаһи йән тип иҫәпләгән. Имеш, аллалар был әҙәм балаһының йәненә изге ут өргән, ә ул ошо уттың яҡтыһын, йылыһын тирә-йүнендәге ябай кешеләргә өләшергә тейеш. Ошо утты күкрәгендә тойоп, кешелек алдында үҙенең изге бурысын атҡара алһа ғына ул тынғы, йән тыныслығы таба ала, имеш...



«Ҡурайҙа уйнарға өйрәнгәндә миңә һигеҙ йәш ине... Үҙемде һигеҙ йәштән музыкантмын тип иҫәпләнем... Шул саҡтан бирле ҡурайымды ҡулымдан төшөрмәнем. Ҡурай мине Мәскәүгә, консерваторияға алып барҙы, сәнғәткә килтерҙе. Уға рәхмәтем бөткөһөҙ... Ғүмер юлымда яҡшы кешеләр күп осраны. Ҡайһыны — йылы һүҙе, ҡайһыны эше менән ярҙам итте — уларға рәхмәт. Халҡыма рәхмәт — хеҙмәтемде бик юғары баһаланы, ижадымды яратты. 85 йәш — аҙ ғүмер түгел... Бик яҡын дуҫым, ижадташым Баязит ағай Бикбайҙың «Ғүмер — ул бер йотом һыу», тигәне әле лә ҡолағымда. Шулай икән... Әле генә миңә 25 ине, бына 85 тә тулып уҙҙы...

Ғаиләмдән уңдым. Хәләл ефетем Мәхсүфә менән 50 йылдан ашыу бергәбеҙ. Ул миңә яҡшы ҡатын, балаларыма һәйбәт әсә булды. Иң ауыр мәлдәрҙә лә һис ҡасан зарланманы, эштән ҡайтһам — йылмайып ҡаршыланы, йылмайып оҙатып ҡалды, миңә лә, башҡаларға ла йөҙө яҡты булды. Миңә бүләк ителгән премия, ордендар барыһы ла икебеҙгә уртаҡ бирелгән, сөнки нимә эшләһәм дә, нимә яҙһам да, беренсе ярҙамсым — Мәхсүфә. Балаларымдың минең юлымдан барыуына шатмын. Оло ҡыҙым Таңсулпан — музыка уҡытыусыһы, Гүзәл — филолог, музыкант булмаһа ла музыканы бик нескә тоя. Ләйлә — композитор. Уның үҙенсә, башҡаларҙы ҡабатламайса ижад итеүсе, етди композитор булыуы менән ғорурланам».

* * *

Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта
Уң ҡулында булыр ҡурайы...

Халыҡ Ҡаһым түрәнең исемен киләсәк быуындар белһен тип, ҡәҙерләп йырға һалған. Һалған да, батырға булған мөнәсәбәтен бер генә һөйләм — ҡулындағы ҡурайын телгә алыу менән сикләнгән. Шуның менән Ҡаһымдың рухи көсөн дә, күңел байлығын да, ниәттәренең сафлығын да, һәр эшкә маһирлығын да әйтә алған. Сөнки, борондан килгән әйтем буйынса, «йырлының күңеле нурлы». Тар күңеллеләрҙең тыны ҡыҫҡа була, ундай кеше ҡурайҙа уйнай алмай, тип ышанған халыҡ.

Заһир Ғариф улының рояле һәр саҡ асыҡ тора. Ә эш өҫтәлендә — ҡурай...